# УВАЖАЕМЫЕ ЛЮБИТЕЛИ ЧТЕНИЯ!

Предлагаем Вам обзор новых книг,
поступивших в Центральную межпоселенческую библиотеку.




**Фәнил Бүләков** бик күп шиғырҙарында бөгөнгөбөҙ һәм киләсәгебеҙ яҡтылығында быуындар күсәгилешлегенең ролен билдәләп үтә. Шағирҙың ижадында тыуған ерҙең һәр бер үләнен, һәр ағасын, һәр ташын, һәр биҙәген яратыу тойғоһо тормош, йәшәйеш йыры менән берләшә. Ҡыҫҡаһы, тыуған ағыбыҙҙың, замандың йөрәк тибешен ишетергә теләһәгеҙ, үҙегеҙҙең уйҙарығыҙға, хис–тойғоларығыҙға ауаздашлыҡ эҙләһәгеҙ, **Фәнил Бүләковтың "Торналарҙы офок саҡыра"** китабын мотлаҡ алып уҡығыҙ!

**Хөрмәтле китап уҡыусылар!**

Яҙыусының күптән түгел донъя күргән **«Әҫәрҙәр»** китабының II томына **«Ярҙағы усаҡтар»**, **«Осона сыға алмайым бер уйҙың»**, **«Бал, тип үрелгәнем»**, **«Аҡ ҡалас»** кеүек хикәйәләре индерелде. Шулай уҡ был томға мәшһүр **«Бөйрәкәй»** пенталогияһының икенсе өлөшө, **«Ай менән Ҡояш бер генә»** повесы, шулай уҡ республика театрҙарында ҙур уңыш менән барған **«Төштәге йыр»**, **«Ямғыр көткәндә»** исемле пьесалары, нәҫерҙәре, замандаштары тураһындағы очерктары, мәҡәлә-яҙмалары ла урын алды.






Автобиографик повеста ***Ибраһим Ғиззәтуллин*** үҙе күргән-кисергән тетрәндергес ваҡиғаларҙы шәхси яҙмышына бәйләп һүрәтләй. Повестан тыш яңы баҫмала яҙыусының шулай уҡ **«Тәүге тапҡыр»** исемле хикәйәһе лә урын алған. Китапҡа Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусин баш һүҙ яҙа. **«Үлемһеҙлек»** тип аталған мәҡәләһендә Ноғман Мусин китап уҡыусыға был әҫәрҙең яҙылыу тарихын һөйләй.




***Тамара Ғәниева*** – ижады хәҙерге башҡорт шиғриәтенең кимәлен билдәләгән, шиғри һүҙе күңелдәргә үтеп инер ҡөҙрәткә эйә әҙиптәрҙең береһе. Публицистика, драматургия, тәржемә өлкәһендә лә ул ең һыҙғанып эшләй, уңыштары бихисап әҙәби премиялар менән бүләкләнә. Шағирәнең **«Һайланма әҫәрҙәр»**енең 1-се томына төрлө йылдарҙа донъя күргән шиғырҙары тупланды.

Наиболее значительным произведением **Гали Ибрагимова** является исторический роман монументального характера **«Кинзя»** о событиях Крестьянской войны 1773 – 1775 гг. Роман создан на основе подлинных исторических событий, биографических данных реальных исторических личностей. По жанровой разновидности **«Кинзя»** является историко-биографическим романом. Обилием исторических личностей, многообразием исторического материала произведение тяготеет к панорамности. В произведениях на документальной основе нашли отражение история, быт башкирского народа. Для среднего и старшего возраста.






## Ишемгулов Н.У. Образование Башкирской республики Уфа: Китап, 2018. — 172 с.




В преддверии Дня Республики, а также в рамках подготовки к празднованию 100 – летия образования Башкирской Республики в ГУП РБ «Китап» им. Зайнаб Биишевой вышла в свет книга **«Образование Башкирской Республики».**

Монография посвящена актуальной проблеме – истории образования Башкирской автономии. Автор проанализировал связи башкирского движения с национально-политическими организациями, политику коммунистической партии и других общероссийских политических образований по отношению к Башкирской республике, дал свою оценку. Издание предназначено для историков, политологов, политиков, преподавателей, студентов, краеведов, а также для всех интересующихся историей России и Башкортостана.




Китапҡа «Башҡортостан – беҙҙең оябыҙ», «Ҡырмыҫҡалы дәфтәренән», «Табындарға табыныу», «Бағышлауҙар», «Арнауҙар», «Ауыр яҙмышлы халыҡтың шағиры булыу ауыр…», «Ижади портреттар», «Иҫтәлектәр» исемле бүлектәрҙән төҙөлгән йыйынтыҡта шағирҙың быға тиклем донъя күрмәгән әҫәрҙәре (2013 – 2016 йылдарҙа яҙған шиғырҙары) һәм ҡәләмдәштәренең шағир хаҡында иҫтәлектәре индерелде.

Күренекле башҡорт шағиры Яҡуп Ҡолмойҙоң тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы нәшер ителгән **«Һайланма әҫәрҙәр»** китабына шиғырҙары, сонеттары, поэмалары тупланды. Авторҙың был әҫәрҙәрендә башҡорт халҡының рухи ныҡлығы, үҙ илен, тыуған төйәген мөкиббән яратыуы, тоғролоғо асыҡ сағыла.



**Народы Башкортостана: энциклопедия/ гл. ред. Ф. Г. Хисамитдинова - Уфа: Башкирская энциклопедия, 2014. – 528 с.: ил., карты.**




Энциклопедия посвящена народам, населяющим Республику Башкортостан. В книге приведены сведения об этногенезе, этнической истории, территориальном расселении народов края, их численности, языке, традиционной духовной и материальной культуре, социальном устройстве, современном состоянии и развитии народа на территории республики. В энциклопедию также вошли статьи об этнологических понятиях, научных и культурных учреждениях, выдающихся учёных-этнографах, краеведах, внёсших вклад в изучение народов Башкортостана.

Настоящая книга – воспоминания ветерана Великой Отечественной войны. Это судьба человека, выросшего в трудных условиях многодетной семьи, как и многие его сверстники, с самого детства помогавшего родителям кормить семью. Автор показал, как растёт и учится молодёжь его поколения, как готовится к службе в Красной армии её мужская половина, как она служит в предвоенные годы и встречает врага на западной границе нашей Родины. Очень тепло и трогательно написал автор о нашем народе, который победил в этой страшной войне ценой огромных усилий, ценой жизни миллионов соотечественников и встретил День Победы действительно со слезами на глазах. Показаны трудности жизни послевоенных лет и вдохновенный труд народа ради восстановления разрушенных городов и сел, заводов и фабрик, во имя светлого будущего.






Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә «Йәштәр тауышы» серияһында бер юлы ике авторҙың китабы баҫылды. **Айбулат Сәсәнбаевтың** шиғриәтендә кеше һәм тәбиғәт темаһы өҫтөнлөк ала. Йәш шағир тыуған яғын һағына, Башҡортостанға мәҙхиә йырлай, бала саҡ йылдарына әйләнеп ҡайта, тарих биттәренә күҙ һала, мөхәббәт диңгеҙендә йөҙә.

Уй-кисерештәренең тәрәнлеге менән уҡыусыны үҙенә йәлеп итә өмөтлө йәш шағирә. Бөгөнгө көндә **Рәсимә Сәлихова** Белорет районының «Урал» гәзитендә хәбәрсе булып эшләй, шиғырҙары «Ағиҙел», «Шоңҡар» журналдарында, «Башҡортостан», «Йәшлек» гәзиттәрендә донъя күрә бара.



**Озеров О.Б. Карим Хакимов: летопись жизни (о судьбах ислама и коммунизма в России) /О. Б. Озеров ; отв. ред. В. В. Наумкин.- Москва : Товарищество научных изданий КМК.2020. – 232 с., портрет, 30 вкл.**




*Книга дипломата и публициста О.Б.Озерова увлекательно рассказывает об удивительной судьбе и малоизвестных страницах биографии одного из первых советских дипломатов Карима Хакимова, заложившего основы отношений нашей страны после Октябрьской революции 1917 года с Саудовской Аравией и Йеменом. В ней также на фоне масштабных исторических событий того периода дается доступный для широкого читателя анализ взаимоотношений различных идеологических течений, переплетавшихся и боровшихся в дореволюционный и постреволюционный период в России и затем СССР — коммунизма, ислама в его российской версии джадидизма и пантюркизма.*




Йыйынтыкта тормош–көнкүреш темаларына арналған төрлө хикәйәләр, нәсерзәр урын алған. **Фәиз Харрасовтың** үзенә генә хас булған тел үзенсәлеген дә билдәләп үтергә кәрәк. Һәр әсәрендә тиерлек ул кеше яҙмыштарын тәбиғәт күренештәре, тәбиғәт миҙгелдәре аша оҫта һүрәтләй. Юморға бай, философик карашлы, тормошсан, ябай тел менән яҙылған **Фәиз Харрасовтың** был яңы китабы уҡыусы һөйөүен яулар.
Йыйынтык БР Хөкүмәте ярҙамы менән баҫтырылды.

**Миңлегөл Хисамованың** был китабында мәңгелек киммәттәр тураһында һүҙ бара. Беҙҙе йәшәткән дә, йәшнәткән дә тыуған ер, тигән фекерҙе кеүәтләй. Донъяла әсәнән дә кәҙерлерәк кеше юҡтыр ул, ти шағирә. Йыйынтыкта шағирәнең 2008–2018 йылдарҙа яҙылған шиғырҙары тупланды.



Произведения **Джеймса Крюса, Льюиса Кэрролл, «Тысяча и одна ночь»** - книги мировой литературы из серии «Литературные сокровища» издательства «Инеш» на башкирском языке.










Серия **«Литературные сокровища»,** которая издаётся благодаря грантам Главы Республики Башкортостан, направленным на сохранение и развитие государственных языков Башкортостана и языков народов Башкортостана, позволит школьникам познакомиться с лучшими образцами мировой литературы на родном языке.

**Әминев-Тамъяни, Шафиҡ Әмин улы Әйтер һүҙем бар: [шиғырҙар, бәйеттәр, нәсихәттәр]/Ш.Ә. Әминев-Тамъяни;[авт. предисл. З. Шарипова].-Өфө: Китап, 2018.-80 с.**




1858 йылдың 19 мартында Ырымбур губернаһы Верхнеурал өйәҙе Тамъян-Түңгәүер олоҫо Әбделғәзе ауылында тыуған Шафиҡ Әмин улы Әминевтең исеме республика кимәлендә бары XX быуаттың икенсе яртыһында ғына мәғлүм булды. Әммә Башҡортостандың көньяғында, айырыуса тыуған төйәге Әбйәлилдә, уның шиғыр, бәйет, нәсихәттәре телдән дә, күсеректәр рәүешендә лә күптән билдәле ине. Киң ҡатлам уҡыусыларға тәғәйен был йыйынтыҡ сәсәндең быға тиклем ташҡа баҫылған һәм халыҡ араһынан яҙып алынған байтаҡ бүтән әҫәрҙәренән төҙөлдө. **Төҙөүселәре: Әхмәт Сөләймәнов һәм Самат Фәйзуллин.**

Конечно, в представленном обзоре мы рассказали лишь о малой части новых книг, полученных библиотекой. Увидеть всё многообразие новинок многоотраслевой литературы, пополнившей наш фонд, прочитать только что написанные произведения любимых авторов вы сможете, посетив Центральную межпоселенческую библиотеку, по адресу: г. Бирск, ул. 8-Марта, 42

Приятного Вам чтения!